# СИЛӘБЕ БАШҠОРТТАРЫ ЙЫЙЫНЫ

17 мартта Силәбе ҡалаһында, дәүләт филармонияһы бинаһында өлкә башҡорттарының VI ҡоролтайы уҙғарылды. Унда Өфөнән барған делегация составында Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Ә.М.Сөләймәнов һәм комитеттың башҡа хеҙмәткәрҙәре, Мәҙәниәт һәм милли сәйәсәт министрлығы хеҙмәткәре А.Р.Сирғәлина, шағир Хәсән Назар, ”Далан” эстрада төркөмө артистары, Башҡорт халкының үҫеш ижтимағи фонды директоры Д.М.Фәйзуллин, журналистар, Стәрлетамаҡ филармонияһы артистары булды.

Ҡоролтайҙа отчет доклады менән Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Марат Рәфҡәт улы Камалов, ҡотлау һүҙе менән вице-губернатор Андрей Николаевич Косилов, Башҡарма комитет рәйесе урынбаҫары Ғәҙел Камил улы Вәлиев, Бөтә донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әхмәт Мөхәмәтвәли улы Сөләймәнов сығыш яһаны.

Фекер алышыуҙарҙан һуң ҡоролтай резолюция ҡабул итте, Башҡарма комитет ағзаларын һәм уның рәйесен һайланы. Силәбе өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе вазифаһына Марсель Харис улы Йосопов һайланды (Мәғлүмәт өсөн: М.Х.Йосопов 1969 йылда тыуған, күренекле спортсы һәм тренер Харис Йосоповтың улы, өйләнгән, өс бала тәрбиәләй. Силәбе политехник институтын тамамлаған, бизнесмен). М.Йосоповтың фекеренсә, ҡоролтай киләсәктә дәүләт структуралары менән тығыҙыраҡ бәйләнештә эшләргә, үҙ активистарын парламенттарға үткәрә башларға тейеш. Үҙ эшен Башҡарма комитет өсөн заманса йыһазландырылған офис булдырыуҙан, үҙ банк иҫәбе асыуҙан башларға ниәтләнә. Офис, почта адресы, телефон, башҡа төр элемтә барлыҡҡа килгәс, ҡоролтайҙың урындағы ойошмалары, Башҡортостан менән бәйләнештәрҙе, корреспонденция алмашыуҙы көйләүҙе унышлы эшмәкәрлекте тергеҙеүҙең төп шарты тип иҫәпләй. Йәштәр, бизнесмендар менән хеҙмәттәшлекте көсәйтергә йыйына.

”Ватандаш” уҡыусыларына ҡоролтайҙың отчет докладын һәм резолюцияһын тәҡдим итәбеҙ, улар оригинал телендә бирелә.